**2 – 4 синыфтар өсөн**
**Башҡорт (дәүләт) теленән эш планы**

**Уҡыу предметын өйрәнгәндә планлаштырылған һөҙөмтәләр**

*Уҡыусыларҙың "Башҡорт теле" фәнен өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:*

Уҡыусы өйрәнәсәк:

башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңларға, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләргә.

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- башҡорт (туған) теленең эстетик ҡиммәтен аңларға;
- башҡорт (туған) телгә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланырға;
- милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт (туған) теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күрергә;
- телмәрҙе үҙ камиллаштырыуға ынтылырға;
- аралашыу-телмәр процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекерен иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштерергә;
- үҙ телмәреңде күҙәтеү нигеҙендә үҙ телмәреңде баһалау һәләтлеген үҫтерергә.

*Метапредмет һөҙөмтәләре:*

Уҡыусы телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен өйрәнәсәк:

аудирование һәм уҡыу:

- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте (*коммуникатив* йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итергә;
- төрлө төрҙәге уҡыуҙы (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, төрлө жанрҙағы текстарҙы үҙләштерергә;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итергә;
- төрлө төрҙәге аудирование (һайлап алыу, танышыу) менән эш итергә.

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- һайлап алыу алымдары менән эш итә белергә һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтерергә;
- уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булырға;
- мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алырға, еткерә белергә;
- йөкмәткенән, стилистик үҙенсәлектәрҙән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алырға;
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алырға һәләтле булырға, шулай уҡ матбуғат сараларынан, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискыларҙан, Интернет ресурстарҙан;
- төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланырға, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алырға һәләтле булырға.

Һөйләү һәм яҙыу:

Уҡыусы телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен өйрәнәсәк:

- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләргә һәләтле, хәрәкәттең эҙмә-эҙлеклеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһаларға һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтергә;
- тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, конспект, аннотация) һөйләй алырға;
- төрлө телмәр стилендә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм ситуация буйынса мәғәнәне телдән һәм яҙма төҙөй алырға.

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белергә, тексты (логик яҡтан төҙөк, эҙмә-эҙлекле) төҙөү нормаһын һаҡларға;
- төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге моно- логтарҙың берләшеүе) һәм диалог (төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүен) үҙләште- рергә;

- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һаҡларға; яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡларға;
- телмәр-этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, аралашыу процесында жест, мимиканы адекват ҡулланырға;
- уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алырға;
- йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белергә;
- грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алырға; үҙ тексыңды редакторларға һәм камиллаштыра белергә;
- үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһай алырға;
- бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнаша алырға;
- алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белергә;
- аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнеш, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләргә, бәхәстә, көнүҙәк темаға күтәрелгән фекер алышыуҙа ҡатнашырға;
- формаль һәм формаль булмаған шәхес, аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштерергә.

*Предмет һөҙөмтәләре*

Уҡыусы өйрәнәсәк:

- телдең төп функцияһы, башҡорт халҡының милли теле булараҡ башҡорт теленең ролен, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ, тел менән халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнеше, кеше һәм йәмғиәт тормошонда туған телдең ролен күҙалларға;
- гуманитар фәндәр системаһында башҡорт (туған) теленең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңларға;
- башҡорт (туған) теле тураһында төп белемде үҙләштерергә;
- уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңларға;
- лингвистиканың төп аңлатмаларын үҙләштерергә: лингвистика һәм уның бүлектәре;
- тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, телдән һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре;
- һөйләү телмәре, ғилми, публицистик, официаль-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; текст, текст төрҙәре;
- телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәре.

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- башҡорт (туған) теленең лексик һәм фразеологияның төп стилистик ресурстарын үҙләште-рергә, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын(орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик, пунктуацион), телмәр этикет нормалары, телдән һәм яҙма фекерҙе ғәмәлдә ҡулланырға;
- һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен үткәрергә (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш,лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ, текстың төп билдә һәм структура күҙлегенән күп аспектлы анализ, тел-һүрәтләү сараларын ҡулланыуын иҫәпкә алырға;
- телдең төп берәмектәрен, телдең грамматик категорияларын анализларға һәм танырға, тел берәмектәрен аралашыу интуицияларына тап килеүен белеп ҡулланырға;
- лексик һәм грамматик синонимдарҙың *коммуникатив-эстетик* мөмкинлектәрен аңларға һәм үҙ телмәреңдә ҡулланырға;
- башҡорт (туған) теленең эстетик функцияһын танырға.

Уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусылар белергә тейеш:

- йәмғиәт тормошонда телдең ролен, башҡорт (туған) теленең әһәмиәтен белергә;
- синтаксис, стилистика; тыныш билдәләре, текст, һөйләм төшөнсәләре;

- фонетика, телмәр өндәре, ижек, һүҙ баҫымы, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр; өндәрҙең бер-береһенә оҡшашыуы (сингармонизм) төшөнсәләре;
- орфоэпия (дөрөҫ әйтелеш), төп орфоэпик норма төшөнсәләре;
- графика; алфавит; хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыу төшөнсәләре;
- орфография (дөрөҫ яҙылыш), һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы, һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың һүҙҙең тамырында, ялғауҙа, һүҙ араһында яҙылышы һәм әйтелеше, һүҙҙе юлдан юлға күсеререргә;
- лексика; һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе; һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе; синонимдар, антонимдар, омонимдар;
- грамматика, морфема (ялғау, һүҙҙең бер өлөшө, киҫәге); тамыр, нигеҙ, яһаусы ялғау, үҙгәртеүсе ялғау; тамырҙаш һүҙҙәр; һүҙьяһалыш юлдары;
- тексттың эсендә һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнеп килеү саралары (юлдары); йәнле һөйләү, фәнни, күркәм (художестволы) стилдәр;
- телмәр төрҙәре (типтары): хикәйәләү, тасуирлау (һүрәтләү), хөкөм сығарырға (мөнәсәбәт белдереү);
- текстың төп фекерен, автор нимә әйтергә теләгәнен билдәләй белергә;
- текстың башланышын һәм тамамланышын күрһәтә белергә;
- өлгөгә ҡарап диалогтар төҙөргә.

<u>Түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:</u>

- иншаға материал туплорға һәм уны системалаштырырға;
- фонетика, өн-хәреф, һүҙьяһалыш, һүҙ төҙөлөшө буйынса анализ яһай белергә;
- өйрәнелгән орфография ҡағиҙәләрен тәртипкә килтерергә
- өндәш һүҙе һәм тиң киҫәктәре булған ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белергә.

Үҙләштергән белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡулланырға:

- фонетика, өн-хәреф, һүҙьяһалыш, һүҙ төҙөлөшө буйынса анализ яһай белергә;
- һүҙбәйләнеш, ябай ике составлы һөйләмдәр, теркәүесһеҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәр төҙөй белергә;
- һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙың төп һыҙаттарын дөйөм билдәләре буйынса төркөмләй, һүҙҙәрҙең тамырында, ялғауҙарында һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙы дөрөҫ яҙа, өйрәнелгән орфография ҡағиҙәләрен тәртипкә килтерә белергә;
- төрлө мәғлүмәт саралары менән эшләргә (һүҙлектәр, белешмәләр);
- диалогта йә бәхәстә ҡатнашырға;
- йәнле һәм яҙма телмәрҙә синонимдарҙы, антонимдарҙы, күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе ҡуллана белергә;
- яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың мәғәнәләрен айыра белергә;
- өндәш һүҙе һәм тиң киҫәктәре булған ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белергә.

Ижади һәләттәрҙе үҫтереү:

- билдәле бер тема буйынса өҫтәмә материал табырға һәм сығыш яһарға;
- иншалар, яттан шиғыр һөйләүселәр конкурстарында ҡатнашырға.

## Уҡыу предметының йөкмәткеһе

## 2 класс

*Танышыу.* Һин кем? Ә хәрефе. Һеҙ кем? Ә хәрефе. Һинең исемең кем (нисек)? Һ хәрефе. Һин ҡайҙа йәшәйһең? Һиңә нисә йәш? ң хәрефе.

*Был мин.* Тән өлөштәре. Ауырта\ауыртмай. Ҙ хәрефе.

*Минең ғаиләм.* Минең, һинең, уның. Бармы? Ү хәрефе. Минең әсәйем. Нимә эшләй? Ҡ хәрефе Ҡ хәрефе.

*Мин нимә яратам?* Нимә менән? Ғ хәрефе.

*Минең мәктәбем.* Мәктәп ниндәй? Ө хәрефе.

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. ç хәрефе.

*Минең класым.* Класс ниндәй? Мин мәктәпкә йыйынам. Кемдеке?

*Мин уҡыусы.* Нисек?

*Мин дәрестә.* Ҡайҙа?

*Мин дәрестән сыҡтым.* Нимә эшләйем?

*Минең уйынсыҡтарым.* Нимә? Нимәләр? Тиҙҙән Яңы йыл. Нимә эшләйбеҙ? Г.Юнысова "Беҙҙең йортта". Ниндәй? Ф.Туғыҙбаева "Әсә зары". Нимә эшләмә?

*Мин уйнарға яратам.* Нимә эшләйбеҙ? Ҡ.Даян "Тышта ҡар яуа!" Нимә эшләйбеҙ? Н.Иҙелбай "Катокта". Нимә эшләйбеҙ?

*Мин уйнарға сығам.* Миңә нимә кәрәк? Ф.Мөхәмәтйәнов "Беҙ уйнайбыҙ"

*Мин уйнарға сыҡтым.* Нисәнсе?

*Минең кескәй дуçтарым.* Был нимә? Ниндәй? А.Игебаев "Аҡтүш" Ниндәй? Бүләк. Ни эшләй?

*Мин ял итәм.* Ҡайҙа? Ҡайҙан? Иң көслөһө. Ҡасан? Беҙҙең ҡанатлы дуçтарыбыҙ. Йорт хайуандары. Был нимә? Нимәгә?

Минең көн тәртибем. Нисәлә? Алда йәй. Нимә менән? Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

*Контроль күсереп яҙыу*

## 3 класс

*Һаумы, мәктәп!* Танышыу. Һин кем?

*Мин танышам.* Һин ҡайҙа йәшәйһең? Дуçтар эҙләйем. Һин ҡайҙан?

*Мин белем алам.* Был нимә? Бармы?"Ялҡау Зилә". Нимәһеҙ?

*Мин һәм минең ғаиләм.* Кем нимә эшләй? Ә. Ихсан "Әсә рәхмәте". Кем ҡайҙа эшләй? Т.Дәү-ләтбирҙина "Әсәйемә". Нимә эшләргә тейеш?

*Мин һөнәр һайлайым.* Кем ҡайҙа эшләй?

*Мин тәбиғәтте яратам.* Нимәләр? Ағастар. Нимәләр? Нимә эшләйҙәр? Сәскәләр. Дарыу үләндәре. Бөжәктәр. Ҡоштар. Йәшелсәләр. Г.Юнысова "Бөгөн байрам". М.Дилмөхәмәтов "Яҙ"

*Минең яратҡан миҙгелем.* Нимә? Нимә эшләй?

*Минең гардеробым.* Ниндәй? "Күлдәк" әкиәте. Ф.Рәхимғолова "Яңы күлдәк" . В.Исхаков "Бер һүҙ". Ф.Туғыҙбаева "Яңы күлдәк". Н.Носов "Тере эшләпә"

*Минең тыуған көнөм.* Ф.Ғөбәйҙуллмна "Беҙҙеңдуç". Ҡасан?

*Мин сәйәхәтсе.* Нимә менән? Нисек? Өфө урамында. Ғ.Ибраһимов "Хәйлә". Юл ҡағиҙәләре.

*Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.* Тел күрке – мәҡәл.

*Үтелгәндәр буйынса тикшереү эше*

**4 класс**

*Көн дә мәктәпкә барам.* 1 сентябрь – Белем көнө. 3-сө класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Мин ниндәй дәресте яратам/яратмайым. Һөйләм төрҙәре. Мин нимә уҡырға яратам? Исем. Мәктәптәге дуҫтарым менән таныштырайыммы? Исемдең күплек ялғауы. Беҙ мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ? Исемдәрҙең телмәрҙәге ҡулланылышы.

*Контроль күсереп яҙыу.*

*Мин ғаиләмде яратам.* Беҙгә бергәләп күңелле. Сифаттың бирелеше. Мин тәрбиәле бала. В.Маяковский. "Нимә ул яҡшы, нимә ул насар?" Сифат. Минең өйҙәге бурыстарым. Сифаттың телмәрҙә ҡулланылышы.

*Минең яратҡан шөғөлөм.* Мин йәшәгән бүлмә. Сифат дәрәжәләре. Минең кескәй дуҫтарым.

*Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем.* Мин йәшәгән ер. Алмаш. Минең күршеләрем. Беҙҙең урам/йорт балалары. Беҙҙең уйындарыбыҙ.

*Ауылда/ҡалала йәшәйем.* Минең тыуған ауылым. Һан. Ауыл һәм ҡала тормошо. Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр. Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары. Тыуған ерем мөғжизәләре.

*Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ.* Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә? Нисек? Ни рәүешле? Йәнлектәр йыл миҙгелен беләме? Ҡасан? Бөжәктәр нисек йәшәй? Һауа торошон белеү ниңә кәрәк? Киләсәктә тәбиғәттә үҙгәрештәр булырмы?

*Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ.* Минең тормошомдағы ҡыҙыҡлы хәлдәр. Ҡылым.

Мажаралар илендә. Нимә эшләй? Нимә эшләйҙәр? Минең иң ҙур хыялым. Минең кумирҙарым. Нимә эшләргә?

*Һатып алырға өйрәнәм.* Минең бюджет. Ҡылым. Мин кейем һатып алам. Бүләк һайлайым. Нимә эшләйем? Яҡташ яҙыусылар ижады менән танышыу. Йомғаҡлау дәресе.

*Диктант.*

## Тематик планлаштырыу
## 2 класс

| | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| | Танышыу | 3 |
| | Был мин | 1 |
| | Минең ғаиләм | 2 |
| | Мин нимә яратам? | 1 |
| | Минең мәктәбем | 2 |
| | Минең класым | 1 |
| | Мин мәктәпкә йыйынам | 1 |
| | Мин уҡыусы | 1 |
| | Мин дәрестә | 1 |
| 0 | Мин дәрестән сыҡтым | 1 |
| 1 | Минең уйынсыҡтарым | 4 |
| 2 | Мин уйнарға яратам | 3 |
| 3 | Мин уйнарға сығам | 2 |
| 4 | Мин уйнарға сыҡтым | 1 |
| 5 | Минең кескәй дуҫтарым | 3 |
| 6 | Мин ял итәм | 8 |
| | Барлығы | 35 сәғәт |

## 3 класс

| | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| | Һаумы, мәктәп! | 1 |
| | Мин танышам | 2 |
| | Мин белем алам | 2 |
| | Мин һәм минең ғаиләм | 3 |
| | Мин һөнәр һайлайым | 1 |
| | Мин тәбиғәтте яратам | 10 |

| | | |
|---|---|---|
| | Минең яраткан миҙгелем | 1 |
| | Минең гардеробым | 6 |
| | Минең тыуған көнөм | 2 |
| 0 | Мин сәйәхәтсе | 7 |
| | Барлығы | 35 сәғәт |

**4 класс**

| | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| | Көн дә мәктәпкә барам | 5 |
| | Мин ғаиләмде яратам | 5 |
| | Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем | 11 |
| | Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ | 4 |
| | Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ | 3 |
| | Һатып алырға өйрәнәм | 4 |
| | Башҡорт  халыҡ  ижады | 2 |
| | Барлығы | 35 сәғәт |